*Ринат ШҘЙБҘКОВ*



# ИНЙ Р БУЙЫ ЛЕГЕНДАЛАРЫ

Белорет районы тарихи үткәндәргә ғәйәт бай төбәктәрҙең береһе. Һикһәненсе йылдар баштарынан хәҙерге көнгә тиклем Инйәр буйы ҡатай ауылдарынан йыйған легенда-риүәйәттәрҙе журнал уҡыусыларына тәҡдим итәм. Уларҙы халыҡ хәтерен һаҡлаған ауыл ҡарттары иҫән саҡта яҙып алған инем. Улар әле ”Башҡорт халыҡ ижады” томдарында баҫылмаған, ҡайһы бер баҫылғанының икенсе төрлө варианты яҙып алынған.

Риүәйәттәр араһында иң күбе — Ҡолман бейҙең батшаға барып, Инйәр буйындағы ерҙәргә жалованный грамота алып ҡайтыуы тураһында. Шуны әйтергә кәрәк, бындай йөкмәткеле риүәйәттәрҙе егерменсе быуат башында белеүселәр бик күп булған. М.Ф.Чурко ”Исторический очерк Тамьян-Катайского кантона” тигән китабында, Ҡолман тураһында бөтә Инйәр буйы ауылдары тиерлек беләләр, тип яҙа. Уның тураһында 1927 йылда Уҫманғәле волосында үткәрелгән фольклор экспедицияһы ла яҙып ала. Риүәйәттәрҙең барыһында ла Ҡолмандың батшаға барыу факты, тағы ла мотлаҡ, дәрәжә-чин һорамай, Инйәр буйындағы ерҙәргә ҡағыҙ һорауы ҡабатлана. Мин һикһәненсе йылдар башында Нөғәмәнов Әхмәҙғәле бабайҙан яҙып алған риүәйәт үҙенең тулылығы менән айырылып тора, унда Ҡолмандың батшаға барып ҡайтҡандан һуң үҫешенә баҫым яһала. Ғәбдүк ауылынан Абдрахманов

Абдулла бабай унының улдары Мәхмүт, Сыҡҡан, Ғәбдүк икәнен яҙҙырҙы, Асы ауылынан Сәләх бабай Фәсхетдинов унының ҡушаматы "Ҡотһоҙ" булғанын яҙҙырҙы, тик бер генә риүәйәттә батшаға барыусы кешеләр икәү булған — улар Ғәбдүк менән Сыҡҡан тиелә. Был риүәйәт шуныһы менән ҡиммәтле — унда батшаға барыр алдынан төбөндә кәңәш ҡорған имәндең яңыраҡ иҫән булыуы әйтелә. М.Ф.Чурко, Яңы Хәсән ауылында ғына батшаға барыусы кешене Хәсән тинеләр, тип яҙа. Ҡолмандың батшаға барыуы ҡатайҙар өсөн бик мөһим ваҡиға булғанлығын унының ошо көндәргә тиклем халыҡ хәтерендә һаҡлана алыуы һөйләй. Бер нисә риүәйәт менән танышҡандан һуң Ҡолмандың ҡайҙа ерләнгән булыуы тураһында ла төҫмөрләргә мөмкин.

Икенсе төркөм риүәйәт-легендалар Инйәр буйы ауылдарының сығышы тураһында. Н.Дмитриев экспедицияһы яҙып алғанса, был урынға башлап Ҡармыш исемле ҡарт килеп ултырып, алты улын төрлө урынға урынлаштырыуы тураһындағы риүәйәт тә, Ҡолман тураһындағы риүәйәттәр ҙә Инйәр буйындағы ауылдарға нигеҙ һалыусылар Ҡолмандың улдары булған, тиеүе был яҡтарға башлап килеп ултырыусылар тураһында һөйләй. Чурко ла, Ҡолман улдары тәүҙә Уҫманғәле, Йөйәк, Асы, Береш ауылдарына нигеҙ һала, иң аҙаҡтан Ҡолман тархандың Ғәбдүк исемле улы Ғәбдүк ауылын нигеҙләй, тип яҙа. Бирҙеғол, Көмбә һәм башҡа был яҡ ауылдар Ғәбдүк, Байҙаш исемле олатайҙарҙан таралған, тигән мәғлүмәттәр ҙә бер-береһен тулыландыра.

Үрҙә иҫкә алған Абдулла бабай Абдрахманов Ҡолман улдарының Сыҡҡан исемлеһе ер эҙләп тик йөрөгән, икенсеһе — Мәхмүт исемлеһе лә тәүҙә Уралтау аръяғында алтын эҙләгән, аҙаҡ әлеге урында төпләнгән, тип яҙҙырҙы. Былары инде Сыҡҡан ауылының, заводчик килеп ҡыуғас, ер эҙләп йөрөү ваҡиғаһын сағылдыра, тип уйларға нигеҙ бирә.

Ауылдарға нигеҙ һалыныу тураһындағы легенда-риүәйәттәрҙә башлыса заводчик ҡыуғандан һуң яңы урынға килеп ултырыу ваҡиғаһы урын алған. Асы, Береш, Татлы, Ноҡат, Уҫманғәле, Яңы Хәсән, Айыс, Арышпар, Әрепҡол һәм башҡа ауылдарҙың ҡасан барлыҡҡа килеүе тураһында мәғлүмәттәр һаҡланмаһа ла, яңы урынға килеп ултырыу сәбәбенә бәйле риүәйәттәр байтаҡ. Ысынлап та, был яңы урынға күсенеү тарихта иҫ китмәле ваҡиға булған — XVIII быуаттың икенсе сиреге башында Белорет заводы хужалары Пашковтарҙың Ҡатай волосы башҡорттарының аҫаба ерҙәрен тартып алып, ғүмер буйы йәшәгән ерҙәренән ҡыуыу ваҡиғаһын Америка аборигендарын ерҙәренән ҡыуыу менән сағыштырып булыр ине, сөнки ун ике ауыл, егерме дүрт утар бер юлы, бер үк ваҡытта күп һанлы регуляр ғәскәр индерелеп ҡыуыла. Был ваҡиғаға бәйле халыҡ йырҙар ҙа сығарған.

Донъя фольклорында билдәле Карфаген ҡалаһын нигеҙләү тураһындағы Дидонаға арналған мифҡа яҡын легенданың "ҡатай варианттары" байтаҡ (Карфагенлылар "тире дәүмәлендәй" генә ер һорап, шул тирене нескә генә ептәргә телеп, ҙур ҡала ултырырлыҡ ергә хужа булалар). Ер һатып алданған тотош бер ауыл халҡын (әзекәйҙәрҙе) "күнтәйҙәр" тип йөрөтәләр (йәнәһе, күндәй ер һатҡандар — күн, тире

ҙурлыҡ ҡына, ә ҡатайса ҡаты итеп әйткәндә, ”күнтәй” булып сыға). Белорет, Ҡатау-Ивановск, Архангельск заводтары өсөн ерҙәрен төрлө ваҡытта һатҡан ҡатайҙар һемәйеп, тау-таш араһына килеп һыйынырға мәжбүр булалар. Олатайҙарҙың ер һатыуына риза булмай, ҡаршы сығып маташҡан егет тураһында риүәйәткә оҡшаш, ҡайһы бер аҡһаҡалдарҙың ерҙәрен бөтөнләй юғалтыуҙан һаҡлап ҡалырға тырышыуҙары тураһында ла мәғлүмәттәр бар легенда-риүәйәттәрҙә. Мәҫәлән, ”Дүнән һуйған” легендаһының бер вариантында урыҫ түрәһен дүнән айғыр һуйып, ите менән һыйлау ваҡиғаһы ер һатып алданыуҙарын нисек тә шымартыу, ерҙе бирмәҫ өсөн тырышыуҙарын күпертеү йәһәтенән дә килеп сығыуы мөмкин (хатта урыҫтарҙың йылҡы ите ашамауы ла иҫәпкә алынмай бында).

”Арышпар ауылы”, ”Дүнән һуйған”, ”Асы ауылы” легендалары бында ҡушымта булараҡ бирелер, улар ошо ваҡиғалар тураһындағы күп легенда-риүәйәттәрҙе тулыландыра. Татлы тураһында һөйләгәндә, Айыс ауылы ла иҫкә алына. Айыс ҡарт Илмәштең ҡустыһы тип әйтелә, әммә төрлө ваҡыттарҙа йәшәгән кешеләр риүәйәт-легендаларҙа бер ваҡиғала ҡатнашыусы булараҡ осрай. Айыс Ишкенә исемле ҡатай старшинаһының атаһы була. Ишкенә Айысов крәҫтиәндәр һуғышында ҡатайҙарҙы етәкләгән яу башлыҡтарының береһе була. Инйәр заводы урынынан ун ике ауыл, егерме дүрт утарҙы икенсе ергә ҡыуыу 1833 йылда атҡарыла.

Ғәбдүк ауылының икенсе исеме Сысҡан икәнлеге мәғлүм, ауылдың ике исем менән йөрөүе лә заводчик тарафынан халыҡтың йәшәгән урынынан ҡыуылыуына бәйле. Сысҡан ауылының Кәрпесте ауылы аҫтындағы Сысҡан туғай тигән ерҙән ҡыуылыуы тарихи факт, Ғәбдүк ауылының элек-электән әлеге урында булыуы ла мәғлүм. Сысҡан халҡы төрлө яҡҡа һибелә. Асы, Мәхмүт ауылдарында ”Сысҡан” араһы булыуы ла раҫлай быны.

Йөйәк ауылының килеп сығышы тураһындағы риүәйәттәр ҙә ысынбарлыҡҡа тап килә. Атауллин Хөснөтдин бабай варианты буйынса, йылға яҙ көнө ташып, төрлө яҡтарҙа ерҙә йөйҙәр һалып, йырҙаһын үҙгәртеп торған. Йөйәк йылғаһы — ер өҫтөнә әленән-әле йөйҙәр яңыртып ағыусы йылға. Ауыл Йөйәк йылғаһы буйында дүрт урында булғанлығын рәүиз материалдары раҫлай. Яңы урынға күсеүе генерал-губернатор Перовскийҙың утарҙар булып йәшәүҙе тыйып, халыҡты бер урынға тупларға ҡушыуы арҡаһында булғандыр.

Ауылдар күбеһенсә шул ауылға нигеҙ һалыусының (төп ауылдан икенсе ергә күсеп ултырыусы) исеме менән аталғандар. Йылға исеменән аталғандарҙан Йөйәк, Манышты, Асы, Береш, Ноҡат, Рәүәт, Ҡалмаш, Ҡаҙмаш һымаҡ ауылдарҙы атарға була.

Байтаҡ риүәйәттәр ара исемдәре килеп сығышын аңлата. Мәҫәлән, ”Туғанаш” араһы исеменә бәйле риүәйәттәр был араның бик боронғо икәнен раҫлай. Был ара Йөйәк ауылында исемен һаҡлаған, топонимик атамаларҙа ла байтаҡ тороп ҡалған — Ғәбдүк ауылы эргәһендәге ҡая, Инйәрҙең ятыуы, Сәфәрғол ауылының икенсе исеме, Арышпар ауылы-

ның элекке ауыл урыны Туғанаш булыуы был араның бик боронғо икәнен иҫбатлай. Сыҫкан араһы шулай уҡ бик боронғо ара (Асы, Ғәбдүк, Түбәнге Телмәй, Мәхмүт ауылдарында). Асылағы "бурҙай" араһы ла бик боронғо булыуы мөмкин.

Топонимик атамаларға бәйле легенда-риүәйәттәрҙең тарихи нигеҙҙәре байтаҡ. Шундайҙарға "Байлар ҡунған", "Изгеләр зыяраты", "Һынташ", "Йөйташ", "Өйташ", "Туған бәйләгән", "Старшина ултырышы", "Ҡара кеше" һәм башҡаларҙы индерергә була.

Риүәйәт-легендаларҙан "Дауыт сәсән", "Моратша бай", "Фатима беҙҙең яҡтыҡы" һәм башҡалары айырым кешеләрҙең тормошона бәйле сығарылған һәм ниндәйҙер кимәлдә ҡатай тормошона бәйле ваҡиғаларҙы сағылдырыуҙары менән ҡиммәтле.

## I. Ҡолман бейгә, Инйәр ҡатайҙарының урыҫ дәүләтенә ҡушылыуына арналған легенда-риүәйәттәр

### Туған бәйләгән

Тәүҙә Сыҫкан һәм Ғәбдүк исемле кешеләр булған. Әле лә Әҫәнтелә (Асы менән Кәрпесте араһындағы урын — Сталин заманында унда ГУЛАГ лагеры була) Сыҫкан туғай тигән ер бар. Сыҫкан шунда йәшәгән. Ғәбдүктең Ҡолман исемле улы булған. Бик бай булған. Ҡама тирәһе йәбештерелгән саңғы кейеп, батшаға барған, күп йәнлек тиреләре бүләк иткән. Батша, был бүләктәр өсөн нимә бирәйем, тип һорағас, Ҡолман Инйәр буйындағы ерҙәргә ҡағыҙ яҙҙыртып алған. Ырау буйҙары ла Ҡолман биләмәләренә ингән. Ҡолмандың улдары күп булған. Иң кесе улы Юнысҡа түбән яҡтан кәләш алып биргән, ҡоҙаларына ер бүләк иткән, сиген йылға буйлап билдәләгән. Хәҙер Сит йылға, Сик йылға тип йөрөтәләр, Сит йылға тигән ауыл да бар.

Ләкин бер йыл ҡоҙалар сикте боҙа, шунан Юныс ун ике ҡайнағаһын ағасҡа бәйләп, ҡамсы менән яра. Бының өсөн ҡайнағалары Юнысҡа үс тотоп, һеңлеләренә ағыу биреп, уны үлтерәләр. Ҡайнағаларының үсе бының менән генә бөтмәй, улар Ҡолмандың донъяһына ут төртөп, һеңлеләрен урлап алып ҡасалар. Батша биргән ҡағыҙ шунда яна, Ҡолман үҙе саҡ сығып ҡотола.

*(1914 йылғы Нөғәмәнов Әхмәҙғәле бабайҙан Ғәбдүк ауылында 1982 йылдың апрелендә яҙып алынды).*

### Ғәбдүк менән Сыҫкандың батшаға барғаны

Әле Сыҫкан туғай тип йөрөтөлгән ерҙә элек Сыҫкан ауылы булған. Унда бер ҡарт имән үҫә, шуның төбөндә Сыҫкан менән Ғәбдүк батшаға барыр алдынан кәңәш ҡорғандар, батшанан ергә ҡағыҙ алып ҡайтҡандар.

*(Белорет районы Кәрпесте ауылында йәшәүсе Нурия әбейҙән бабайы Кәримов Ғүмәр һөйләгәндәрен иҫләүе буйынса 1992 йылда яҙып алынды).*

### Ҡотһоҙ Ҡолман

Ҡолман исемле кеше булған, шул кеше батшаға барған, Инйәр буйындағы ерҙәргә ҡағыҙ алып ҡайтҡан. Уның ҡушаматы "Ҡотһоҙ" булған, Муллаҡай яғы ерҙәрен дә үҙенә яҙҙырған өсөн ҡушҡандар.

*(Асы ауылында 1893 йылғы Фәсхетдинов Сәләхтән 1983 йылда яҙып алынды).*

## II. Инйәр ҡатайҙарының төрлө яуҙарҙа ҡатнашыуы тураһында

### Өйташ

Ғәбдүк ауылы янында Өйташ мәмерйәһе бар. Бында был яҡ кешеләре борон замандарҙа яуҙарҙан ҡасып ҡалғандар. Ирҙәр дошманға ҡаршы торған саҡта ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар, ҡарт-ҡоролар мәмерйәгә йәшенеп өлгөргән. Ҙур яуҙар ваҡытында ирҙәр ҙә йәшеренгән. Салауат яуы ваҡытында Өфө яғынан килгән халыҡ шул мәмерйәлә йәшеренгән. Мәмерйәлә байлыҡтарын да йәшерер булғандар. Аҡтар-ҡыҙылдар ваҡытында ла тегеләренән дә, быларынан да шунда ҡасып ҡалғандар. Был яҡ кешеләре З.Вәлиди ғәскәрендә саңғысылар отряды төҙөгәндәр, шуға ҡыҙылдар халыҡты аяманы, минең атай шунда йөрөгәс, үҙем саҡ ҡотолдом, бөтә нәмәбеҙҙе туҙҙырҙылар, үлтерә яҙҙылар. Халыҡ шул яфаларҙан ҡотолоу өсөн мәмерйәгә йәшенә ине. Ул мәмерйәгә әле инеп булмай, кемдер уның ауыҙын шартлатҡан, аҡтар-ҡыҙылдар һуғышы бөтөр саҡ булды быныһы.

*(Ғәбдүк ауылында Йосопов Ғариф бабайҙан 1982 йылда яҙып алынды).*

### Ҡара кеше

Ырау йылғаһы буйында "Ҡара кеше" тигән ер бар. Ул ерҙән башҡорт ханы Ҡараһаҡал үткән. Шул Ҡараһаҡал туҡтап һыу эсеп киткән ерҙе "Ҡара кеше" тип атағандар, йәнәһе, унан ҡара һаҡаллы кеше үткән.

*(Йөйәк ауылында 1925 йылғы Солтанов Әхмәҙҙәле бабайҙан яҙып алынды).*

### Ырыҫҡол тауы

Туннель үткән тау Ырыҫҡол тауы тип атала. Ырыҫҡол исемле батыр булған, Салауат яуында танылған. Бер һуғыштан һуң һуғышсылары таралған, батша һалдаттары Ырыҫҡолдо эҙәрлекләп килеп, әлеге тауҙа ҡаяға ҡыҫырыҡлағандар. Батыр аты менән бейек ҡаянан һикергән дә, ятыуҙы йөҙөп сыҡҡан да киткән. Йөйәктәге бер тауҙы ла Ырыҫҡол бейеге тиҙәр, Ырыҫҡол Инйәр буйлап килеп, Манажы йылғаһы буйлап кереп киткән дә шул тауға артылған. Шунан Бирйән һыртынан китеп, эҙ яҙҙырған.

*(Ғәбдүк ауылында Баязитов Сәғәҙәт бабайҙан 1982 йылда яҙып алынды).*

## Салауат тобаһы

Йөйәктән өҫтәге Ҡөбәғәт аралынан (арал — утрау) саҡ ҡына өҫтәге тобаны Салауат тобаһы тиҙәр. Унда Салауат атын йөҙҙөргән, шуға ул ятыуға уның исемен ҡушҡандар. Был яҡта яуҙар күп үткән, Салауат та үҙенең ғәскәре менән беҙҙең ауыл аша Ҡытау яғына үткән. Быларҙы ололар һөйләй торғайны. Күбеһе онотолоп та бөткән инде...

*(Солтанов Әхмәҙғәле бабайҙан яҙып алынды).*

## Старшина ултырышы

Йөйәк менән Ғәбдүк ауылы араһында "Старшина ултырышы" тигән ер бар.

Йөйәктә Дауыт исемле кеше булған. Салауат яуы Сермәнгә килгән, ә Дауыт "Старшина ултырышы" тип аталған ерҙә лагерь ҡороп ятҡан, ғәскәр йыйған. Дауыт Ғәбдүк ауылындағы Моратша байҙың кейәүе булған.

*(Ғәбдүк ауылында Баязитов Сәғәҙәт бабайҙан яҙып алынды).*

## Йәһүҙә

Берештән Йәһүҙә саңғысы булған. Зәки Вәлиди саңғысылары арҡаларына пулемет йөкмәп, "Тәрән соҡор" яғынан Инйәргә табан барған. Фронт Аҙауҙан үткән. Ҡыҙылдар Тирәклелә ятҡан саҡта Йәһүҙә разведкаға киткән. Төлкө тауынан төшөп килһә, унда ғәскәр туп-тулы, ти. Ҡыҙылдар үҙен әсиргә алып, саңғыла оҫта шыуыуына аптыраған. Бер саңғыһын ғына биргәндәр ҙә: бар, шулай шыуып ҡара әле, тигәндәр. Тауҙың теге яғы ҡая ташлы, йәйәү ҙә төшөүе ҡыйын, ҡаса алмаҫ, тип уйлағандар. Йәһүҙә һыңар саңғыһы менән тау башына менеп, ыштанын төшөрөп, артын күрһәткән дә тауҙың теге яғына һыңар саңғыһы менән ҡаянан ҡаяға шыуып төшкән дә киткән.

*(Йөйәк ауылында 1904 йылғы Атауллин Хөснөтдин бабайҙан яҙып алынды).*

# III. Ауылдар барлыҡҡа килеүе тураһындағы риүәйәт-легендалар

## Йөйәк ауылы

Элек ауыл был ерҙә булмаған. Түбәнге ауылда Һибәт бай йәшәгән. Һибәт ҡарт Инйәр буйына күсеп ултырған да, ҡалған халыҡты ла Инйәр буйына күсерергә һорап, прошение яҙған. Һибәт ҡарт нәҫелен "һибәтистәр" тип йөрөтәләр.

*(1906 йылғы Әбсәләмов Мәхмүт бабайҙан 1983 йылда яҙып алынды).*

## Һибәт араһы

Йөйәк ауылының әлеге урынына башлап Һибәт ҡарт килеп ултырған. Уға тиклем халыҡ Йөйәк йылғаһы буйында төрлө утарҙа йәшәгән. Үрғышлау, Арағышлау исемдәре шунан ҡалған. Йәйен Арҡайортта йәйләгәндәр, көҙөн Көҙгөйортта ҡышлауға ҡайтыр алдынан булғандар.

Күп кеше утарҙарҙа ғына малын ҡараған (Шәмей, Әлибай, Аҙнабай, Сәлим, Килдеғол утарҙары исемдәре шунан ҡалған). Һуңғараҡ Иҫкауыл тигән ерҙә йәшәгәндәр. Шунда Һибәт исемле ҡарт бик байып киткән, уның ҡырҡ баш һауын һыйыры, туҡһан туғыҙ баш бейәһе булған. Үҙенең ҡустылары, туған-тыумасалары менән Йөйәк йылғаһы буйлап түбәнгәрәк күсеп ултырған, ул урын әле Түбәнгауыл тип йөрөтөлә.

Аҙаҡ Һибәт был урынды ла ташлап китеп, Инйәр йылғаһының уң ярына, әле "Таш төбө" тип йөрөтөлгән ергә килеп ултырған. Элек ауыл урыны тотош ҡарағайлыҡ булған, Инйәр тар, тәрән булған. Ҡарағайҙарҙы йыҡһаң, осо икенсе ярға барып ятыр булған. Әле генә ул яр ашалып бөттө, Инйәр һайыҡты, ағастар ҡырҡылып бөткәс ни.

Һибәт ҡарт, яңғыҙыма ылау сабыу ҡыйын, тип, ҡалған халыҡты ла Инйәр буйына күсереүҙәрен һораған. Ауылға урядник килеп, халыҡты әлеге урынға күсергәндәр. Солтанғәле олатай аҙаҡ Ғәбдүккә, Ҡарағай яры тигән ерҙең ташын аҡтарып, арба менән үтерлек юл һалған. Ҡолбай исемле олатайҙан Ҡолбай ҡылыһы тигән ер тороп ҡалған. Һибәттән таралған нәҫелде "һибәтистәр" тиҙәр (Хужиндар, Әбәйҙуллиндар, Сәғәҙәтовтар, Солтановтар). Солтановтарҙы тағы ла "һуна" тип тә йөрөтәләр. Бер олатайыбыҙ бик оҫта ҡурайсы булған, өҙләүгә лә оҫта булған. Ҡайһы берәүҙәр өҙләүен "һуна өйрәк кеүек быжҡылдап тик ултыра" тигән дә, уға "һуна" ҡушаматы йәбешкән дә ҡуйған.

*(1925 йылғы Солтанов Әхмәҙғәле бабайҙан яҙып алынды).*

## Асы ауылы

Мулдаҡай ауылы кешеһе Мөхәмәтшәрип исемле ҡарт һөйләгәйне миңә. Ҡатайҙар борон әлеге Силәбе ерҙәрендә йәшәгән. Салауат яуына тиклем әлеге Мулдаҡай ауылы булған ерҙәр, Ҡытау яҡтары Асы ауылы ерҙәре булған. Ул ерҙән уларҙы заводчик ҡыуалаған. Шулай итеп, халыҡ тау-таш араһына килеп ултырырға мәжбүр булған.

*(1984 йылда Солтанов Әхмәҙғәле бабайҙан яҙып алынды).*

## Асы ауылы (вариант)

Борон Асы халҡы Ҡытау яғында, Самодуровка ауылы янында, "Усман ташы" тип аталған ерҙәрҙә йәшәгән. Был ер хәҙер баяр ере тип, халыҡты ҡыуа башлағандар. Асылар ҡайҙа барырға белмәйенсә, ошо ергә килеп ултырғандар. Был ерҙәрҙә тәүҙә ҡуйы урман булған. Элекке Асы ерҙәрендә урыҫ ауылдары барлыҡҡа килгән. Үрге Телмәй ауылы шул ерҙәрҙә аҙаҡтан барлыҡҡа килгән.

*(Асы ауылында йәшәүсе Сәләх Фәсхетдиновтан 1983 йылда яҙып алынды, ул саҡта бабай туҡһан йәштә ине).*

## Көмбә ауылы

Тәүҙә Ғәбдүк, Байҙаш олатайҙар булған. Был тирә ауылдар шуларҙан башланған. Беҙҙең олатайҙар тәүҙә әлеге Ғәбдүк ауылы тирәһендә, аҙаҡ Рәүәт йылғаһы башындағы "Өкө атҡан" тигән ерҙә йәшәгәндәр. Шунан Бирҙеғол, Уҫманғәле, Хәсән ауылдары барлыҡҡа килгән. Бер

олатайҙы Айыу Бәйҙәш тип йөрөткәндәр. Шул Айыу Бәйҙәштән беҙҙең Шәрәфетдин олатай тыуған. Шәрәфетдиндең Хәтирә исемле ҡатыны була. Бер ваҡыт Шәрәфетдин бер байҙы үлтерә һуҡҡан, шуның өсөн уны Себер һөрәләр, Әхмәдйән исемле малайы ҡала. Хәтирә ҡатыны икенсе бер байға сыға, уныһы Әхмәдйәнде рәнйетә. Шәрәфетдин Себерҙән ҡайтып, Әхмәдйән улын үҙенә ала. Айыу Бәйҙәш йәшәгән ауыл аҙаҡ Көмбә булып киткән.

*(Көмбә ауылынан Мөлкаман Шәрәфетдиновтан 2001 йылда яҙып алынды).*

## Арышпар ауылы

Арышпар элек ”Сирай утары” тип йөрөткән ерҙә, Инйәр буйында булған. Заводчик килгәс, был ерҙән ҡыуып ебәргән. Мөхәмәтйән ҡарт хәҙерге урынға килеп ултырған. Уның атаһы Игеҙәк исемле булған, шуның өсөн Мөхәмәтйән нәҫелен ”игеҙәктәр” араһы тип йөрөтәләр. Уның Йосоп, Мәсәлим, Шәйхурислам, Тәржемә, Мамила, Ишбирҙе исемле улдары булған. Йосоптан Сиражетдин (”Сирай утары” исеме унан ҡалған), Бәҙретдин, Ямаш (Ямалетдин) исемле улдары тыуа. Бәҙретдиндән Фазлетдин, унан Муса улы тыуа. Муса минең атайым, заманында уҡымышлы кеше ине. Өфөлә ”красный директорҙар” мәктәбен тамамлап, Инйәр леспромхозында участок начальнигы, ЛПХ директоры урынбаҫары булып эшләне. 1937 йылда нахаҡҡа ғәйепләнеп ҡулға алынды ла кире әйләнеп ҡайтманы, инәйемде лә ултырткайнылар, ул бер нисә йылдан ҡайтты.

*(Арышпар ауылында йәшәүсе Фазлетдинов Хәләф Муса улынан 1994 йылдың октябрендә яҙып алынды).*

## Дүнән һуйған

Мәнейәк йылғаһы буйында Илмәш ҡарт йәшәгән. Заводчик килеп ҡыуғас, әлеге Татлы ауылы урынлашҡан ергә килгәндәр. Тәүҙә ауыл Илмәш тип аталған, аҙаҡтан ҡустыһы Татлыбай исеме менән Татлы тип атала башлаған.

Илмәш ҡарт тау башында халыҡты туҡтатҡан да, дүнән айғырын һуйып, ары ошо ерҙән бер ҡайҙа ла китмәйбеҙ, тип ант иткән. Аҙаҡтан урыҫ түрәне һыйлап килешкәндәр, ти. Мәнейәк йылғаһы буйында Айыс ҡарт та йәшәгән. Ул ағаһы Илмәштән айырылып, икенсе ергә күскән.

*(Собханғол (Урман Рәүәт) ауылында 1929 йылда тыуған, Татлы ауылында йәшәүсе Нариман Ишдәүләтовтан 1984 йылдың октябрендә яҙып алынды).*

## Собханғол (Урман Рәүәт)

Заводчиктар башҡорттарҙы элекке ерҙәренән (Рәүәт йылғаһы буйында) ҡыуып ебәргәндән һуң, ағалы-энеле Кинйәғол, Собханғол, Хисаметдин айырым-айырым утарҙар булып ултырған. Кинйәғол Йөйәк йылғаһы башында урынлашҡан, Собханғол үҙҙәре ташлап киткән ергә оҡшаш йылға ярында урын һайлаған, йылғаны ла Рәүәт тип атаған. Хисаметдин иһә, оҙаҡ ҡына ер эҙләп йөрөгәндән һуң, Собханғолдан алыҫ түгел,

шул йылғанан түбәнерәк нигеҙләнгән. Шул урын әле Хисаметдин утары тип йөрөтөлә.

*(Урман Рәүәттә тыуып үҫкән, Нукат ауылында укытыусы булып эшләгән, әле хаклы ялдағы Хәбиәхмәтов Вәлиәхмәт ағайҙан 1983 йылда укыусылар менән походка барғанда яҙып алынды).*

### Яңы Хәсән ауылы

Хәсән ауылы халҡы, заводчик ҡыуғас, туғайға килеп ултырған. Ауылды Яңы Хәсән тип атай башлағандар. Тик был урынды һыу баҫкас, тағы ла күсенергә тура килә — әлеге урынға. Элек ултырған туғайҙы Шаршы туғай, уның дауамын Оҙон туғай тиҙәр, Сәфәрғолға тиклем һуҙыла ул туғай. Ауыл тау итәгендә ултыра. Уны Биләғош тауы тиҙәр. Ҡош һымаҡ һуҙылып, биле өҙөлөрҙәй булып ятҡанға Биләғош тигәндәр. Ауылға ҡаршы тауҙы (ул тауҙа хәҙер Инйәр ҡасабаһының бер өлөшө) Беленағас тауы тип йөрөтәләр, элек таҡташ сығара торғайны халыҡ, өйҙәрҙең нигеҙе шул таштарҙан һалынған.

*(Яңы Хәсән ауылынан 1912 йылғы Фәйзуллин Мөхәрләм бабайҙан 1991 йылда укыусылар менән походка барғанда яҙып алынды).*

### Ҡолмас ауылы

Урман Рәүәттән Ҡолмас яланына Фәтхулла, Шафиҡ, Нәби, Ильяс исемле кешеләр килеп урынлашҡан, тары сәскәндәр, ныҡлап төҙөнә башлағандар. Аҙаҡ Рәүәттән ярты ауыл бында күсеп килгән, ундағыға ҡарағанда бында ер иртәрәк асыла.

*(Ҡолмас ауылында йәшәүсе Бибисара Шафикова өләсәйемдән 1981 йылда яҙып алдым. Ошо быуат башында тукһанды үтеп донъя куйҙы).*

## IV. Ер-һыу атамалары тураһындағы риүәйәт-легендаларҙың боронғо ышаныуҙарға бәйләнеләре

### Һынташ

Бирйән тауындағы ошо ҡаяны борон, кеше һынына оҡшатып, уның янында ҡорбан салғандар. Уны "Һынташ" тип кеше һынына оҡшаған өсөн атағандар. Элегерәк, йәшерәк саҡта, уның башына ла менә инек, унда оло кешеләр һалған тәңкәләр була торғайны.

*(Атайым Шәйбәков Гәрәй Әхмәҙи улынан яҙып алдым. Ул 1925 йылғы ине).*

### Изгеләр зыяраты

Оло яландың был яҡ осонда боронғо зыярат бар (әле ул ерҙә Абдулла сабыны). Уны борон Изгеләр зыяраты тип йөрөтә торғайнылар, икенсе исемдәре лә бар — Әүлиә зыяраты ла, Яҡшылар зыяраты ла тиҙәр. Бында тирә-яҡ ауылдарҙан изгеләрҙе ҡуйғандар. Сермән, Бирҙеғол, Татлы, Айыс, Арышпар, Уҫманғәле, Ғәбдүккә тиклем Инйәр буйында ултырған ауылдарҙан билдәле муллаларҙы, башҡа күренекле кешеләрҙе шунда

килтереп ҡуйыр булғандар. Унда борон заманда бер бик күренекле кеше күмелгән. Әүлиә булған, тип һөйләйҙәр.

*(1904 йылғы Атауллин Хөснөтдин бабайҙан яҙып алынды).*

## V. Тормош-көнкүрешкә бәйле риүәйәт-легендалар

### Айыу араһы

Беҙҙе "айыу" араһы тиҙәр, уның тарихы былай: минең нисәнселер быуын олатайым кәләш алған. Ярлы ғына булғас, ҡалымды тулыһынса шунда уҡ түләй алмаған. Борон ҡалым түләп бөтмәйенсә, кәләште кейәү атай йортона алып ҡайта алмаған. Шулай булһа ла, кәләш эргәһенә килә-китә йөрөргә рөхсәт ителгән. Шул арала бесән дә еткән, ә ул ваҡытта һәр эшсе ҡулы ҡәҙерле бит инде, етмәһә, кейәү гел генә кәләше эргәһенә барып, ваҡыт үткәреп йөрөй икән. Ялҡып киткәс, ул кәләшен урларға була. Былай килешәләр: ҡуна бесән эшләп ятҡан ҡыуыш янына килеп, кейәүе төнөн айыу булып тауыш бирергә тейеш. Төндә ул шулай итә лә. Айыу тауышын ишетеү менән ҡыуыштағылар аттарын айыуҙан һаҡлап алып ҡалыр өсөн сығып йүгерәләр, шул саҡ кейәү кәләшен алып ҡаса. Кемдер күреп ҡалып, айыу ҡыҙҙы алып ҡасты, тип һөрәнләй башлаған, айыуҙы ҡурҡытыр өсөн башҡалар ҙа уға ҡушылған, тик тегеләрҙән елдәр иҫкән була. Аҙаҡ был эш асылғас, кейәүҙе "Айыу кейәү" тип йөрөтә башлағандар, аҙаҡ был ҡушамат уның балаларына ла күскән.

*(Урман Рәүәт ауылында тыуған Нариман Ишдәүләтовтан яҙып алынды).*

### Кейәү өйгән

Элек ҡалымды түләп бөтөрмәйенсә кәләште алып ҡайтып булмаған. Кәләше янына килеп-китеп йөрөргә рөхсәт иткәндәрен тәүҙә аңлатҡайным инде. Бынһы икенсе кешегә бәйле ваҡиға. Кейәү, шулай, кәләше янына килә-китә йөрөгән. Кәләше янына барған саҡта, Елмерҙәк һыртын артылғас та бер ташты бер урынға һалған, ҡайтышлай ҙа шулай иткән. Шулай йөрөй торғас, ҙур бер өйөм барлыҡҡа килгән. Ул өйөлгән ташты әле лә "Кейәү өйгән" тип йөрөтәләр.

*(Урман Рәүәт ауылында тыуған Нариман Ишдәүләтовтан яҙып алынды).*

### Туғыҙбаш араһы

Күскенсе араһын, йылдың нисек килеүенә ҡарап, йә Арҡайортта, йә был яҡ Оло яланда йәйләгән өсөн шулай атағандар. Ул араға Фәсхетдиновтар, Нурғәлиндар, Юламановтар, Хызыровтар, Усмановтар, Салауатовтар инә. Ошо Салауатовтарҙың олаталары Кәрим ҡарттың нигеҙен ҡутарғанда туғыҙ ат башы һөйәге килеп сыҡҡан. Шунан уларҙы "туғыҙбаштар" тип йөрөтә башлағандар. Нигеҙ ҡорған саҡта ат башы һалып ҡалдырыу йолаһы була ул, аҡ таш һалһаң да була, тик туғыҙ баш һөйәге булғанғалыр инде — ул нәҫелде "туғыҙбаш"ҡа әйләндергәндәр.

*(1898 йылғы Фәсхетдинов Низам бабайҙан 1984 йылда яҙып алынды).*

## Мәтрәй кордоны

Инйәр заводы менән Архангель заводтары араһындағы юлда кордон булған, ат ашатыу, алмаштырыу өсөн тотолған. Унда Мәтрәй (Дмитрий) исемле урыҫ ат ҡараған, шуға Мәтрәй кордоны тип йөрөттөләр. Аҡтар-ҡыҙылдар ваҡытында атып киткәндәр уны.

Ағайҙар менән бүрәнәгә барған саҡты иҫләйем. Улар миңә, ҡыңғырау тауышы ишетеү менән юлдан сығырға кәрәк, тип аңлаттылар. Почтаны туҡтатырға ярамаған. Сығып өлгөрмәһәң, йөктө, ҡыш көнө булһа, көрткә тартып ауҙарырға тура килгеләгән уларға.

*(Атауллин Хөснөтдин бабайҙан яҙып алынды).*

## Күс юлы

Борон ”Түш”тән (тауҙың түшен киреп ятҡан һымаҡ ере — биләне) Арҡайортҡа барған юлды ”Күс юлы” ти торғайнылар. Шул юл буйлап халыҡ яҙ көнө йәйләүгә күскән. Майҙың урталары етә башлаһа, мал баҡырыша, аръяҡтағылары бирегә йөҙөп сығырға ынтыла торғайны. Күс юлынан тәүҙә йәшерәктәр мал ҡыуып китә, арттан ҡатын-ҡыҙҙар һыбай, башҡалары кәрәк-ярағын атҡа артмаҡлап та, арбаға тейәп тә ҡуҙғалған. Арҡайортҡа ингән ерҙә Туғанаш йәйләүе — унда туғанаштар менән мәнтәйҙәр, буғашайҙар, бүкештәр, Һибәт йәйләүендә — һибәтистәр, һәйетбайҙар менән күскенселәр айырым йәйләгән. Күскенселәр һыу ташҡанда аръяҡ Оло яланда йәйләгәндәр, шуға уларҙы күскенсе тигәндәр.

*(1898 йылғы Фәсхединов Низам бабайҙан Йөйәк ауылында 1984 йылда яҙып алынды).*

## Дауыт сәсән

Йөйәк ауылында тирә-яҡта дан тотҡан Дауыт сәсән булған, һуңғараҡ уның улы Сәйетзада ла ҡурайсы булараҡ танылған.

Бер ваҡыт Дауытты Төркмәнгә ҡунаҡҡа саҡырғандар (Төркмән тип беҙҙә Үрге Ләмәз ауылын әйтәләр). Ҡунаҡ күрергә килгән кешеләрҙе алдан иҫкәрткәндәр, сәсән теленә әләгеп ҡуймағыҙ, бик үткер, тип һөйләйҙәр, тигәндәр. Ҡунаҡта берәү барыбер телен тыя алмаған: ”Дауыт та Дауыт, тиҙәр, исмаһам, һаҡалы ла юҡ таһа, шып-шыма”, — тип ысҡындырған. Быны ишеткән Дауыт: ”Ябалаҡта йөн, һандуғаста моң була инде”, — тип яуаплаған (теге кеше, ысынлап та, һаҡалмыйыҡ баҫып, ябалаҡ кеүек йөнтәҫ икән). Был кешегә шулай ”ябалаҡ” ҡушаматы тағылған да ҡуйған, уның нәҫелен дә ”ябалаҡтар” тип йөрөтә башлағандар.

*(Ғәбдүк ауылында 1896 йылғы Абдрахманов Абдулла бабайҙан яҙып алынды).*

## Байлар ҡунған

Өфө—Белорет юлында, Ҡолмас менән Йөйәк араһында ”Байлар ҡунған” тигән ер бар. Шул исемле йылға ла бар. Уның исеме Инйәр заводы хужаһы Дервиз (Сергей Павлович фон Дервиз. — **Р.Ш.**) менән бәйле. Инйәр заводын һалдырған, ғаиләһе Германияла йәшәгән. Бер

ваҡыт уларҙың был заводты күргеләре килгән. Ҡатыны, улы, ҡыҙҙары, хеҙмәтселәре, һалдаттары менән килгән саҡта, Инйәргә етә алмайынса, шул ерҙә ҡуна ҡалырға тура килгән. Шуның өсөн дә ул ергә ”Байлар ҡунған” тигән исем биргәндәр.

*(1927 йылғы Солтанбәков Зыяитдин Имаметдин улынан яҙып алынды. Архангель районы Ҡыҙғы ауылында тыуған, Белорет районы Ҡолмас ауылында урман ҡараусы булып эшләп, аҙаҡ эшен Йөйәк ауылында дауам итте. Миңә телдән һөйләгәнен аҙаҡ ейәне Артурҙан яҙҙырып ебәрҙе. Миндә ул риүәйәт уның ҡултамғаһы менән һаҡлана).*

## Моратша бай

Ғәбдүктә Моратша исемле бай йәшәгән, уның малдары һыу эсергә төшкән саҡта бер осо Инйәргә етһә, икенсе осо әле һарайҙан сығып етмәгән була. Туғайҙа уның һарайы булған ерҙә тиреҫтән тау хасил булған, әле лә беленеп ята ул ер.

Байҙың ҡатыны кемгәлер йәшереп кенә алтын биреп торған, шунан байҙың донъяһы артҡа тәгәрәгән, Моратша хәйерселектә үлгән. Ҡолман нәҫеленән булған, тиҙәр ине.

*(1896 йылғы Баязитов Сәғәҙәт бабайҙан 1983 йылда яҙып алынды).*

## Фатима

”Сибай”ҙы йырлаған саҡта уның тарихын гелән генә дөрөҫ һөйләмәйҙәр. Фатима Арышпар ауылыныҡы бит ул. Минең атайымдың атаһы Бәҙретдиндең Ямалетдин исемле ҡустыһы Сибай кантондың писаре була. Кантон уның менән ауылдар буйлап йөрөгән сағында, беҙҙең ауылда Фатиманы күреп ҡала. Фатиманы икенсе бисәлеккә һората. Кантон һынлы кантон һоратҡас, ата-инәһе риза булып биргән. Ата-инәһен, тыуған ерен Фатима ныҡ һағынған, Арышпарға ҡайтҡан һайын оҙаҡҡараҡ ҡалырға тырышҡандыр инде. Шулай, бер ҡайтҡанында оҙаҡлабыраҡ киткәс, Сибай кантон Фатиманы һағынып йыр сығарған, тиҙәр.

Сибай кантон үлеп киткәс, Фатима кире ауылына ҡайта. Бәҙретдин олатайым уны Солтан исемле улына алып бирә. Солтан менән Фатиманан әлеге көндә Арышпарҙа Ғүмәровтар таралған.

*(Арышпар ауылында йәшәгән Шәрифә Бәҙретдиновәнан яҙып алынды. Якынса 1904 йылда тыуған).*

## Елмерҙәк

Елмерҙәк һырты Егәҙе яҡтарына тиклем һуҙыла, һыртта һәр ваҡыт еләгәй, себен-серәкәй юҡ, мал унда йәйге селләлә йөрөргә ярата, әле лә тәүге эҫеләр башланыу менән ауыл аттары шул яҡҡа сыға ла китә. Ел һәр ваҡыт иҫеп, ағас япраҡтарын елберҙәтеп торғаны өсөн тауҙы Елберҙәк—Елмерҙәк тигәндәр.

*(Йөйәк ауылында 1925 йылда тыуған Әлибаев Арыҫлан Сәфәрғәле улынан яҙып алынды).*